Донъяла



ЙЫЛДЫҢ ДИНИ ЭШМӘКӘРЕ. Америкалағы күренекле дин әһеле, шәйех Йософ Эстеска "Ислам эшмәкәре - 2012" тигән дәрәжәле исем бирелде. "Шәйехтең хеҙмәте - бидғә индерелмәгән Исламды таратыуҙа" , тип хәбәр итә 7DAYSinDubai. "Эстес хәҙрәт үҙенә был исемде биреүҙәре тураһында ишеткәс, бик шатланды", тип әйтте премияны ойоштороу рәйесе Ибраһим Бумелья. "Ул Дубайҙың вице-президенты, премьер-министры һәм хакимы Мөхәммәд бин Рәшид Әл-Мәктүмгә рәхмәтен белдерҙе" .

Й. Эстес Көнбайышта Исламды таратыу буйынса туктауһыҙ эш алып барғаны, динде боҙоп күрһәтеүселәргә каршы һеҙәмтәле хеҙмәте өсөн ошондай юғары исемгә лайық булды. Ә инде фиҙакәр хәҙрәтте наградлау тураһындағы карар Дубайҙа үткән Халық-ара 16-сы бүләкләү тантанаһында ғына билгеле булды. 15 йыл буйы был дәрәжәле исем Ислам ғалимдарына, президенттарға һәм тотош ойошмаларға бирелә килде. Мысыр шәйехе Мөхәммәд Митвалли Әл-Шарауи (хәҙер инде мәрхүм) 1997 йылда уның тәүге лауреаты булғайны. 2011 йылда БҒӘ президенты Хәлифә Бин зәйед Ән-Нахъян был исемгә лайық тип табылды.

Шәйех Эстес Техасста протестант динен тоткан музыканттар ғаиләһендә донъяға килә. 1991 йылда Исламды ҡабул итә, шунан алып ошо көнгә тиклем хаҡ дингә сақырыусы булып ҡала һәм көнбайышта динде боҙоп күрһәтергә тырышыусыларға ҡаршы көрәш алып бара.

"Ул, үҙенең шәхси вебсайттары - "yusufestes.com" һәм "islamtomorrow.com" дан тыш, һәр төрлә Ислам юлдаш телеканалдарында сығыш яһай" , - тине Бумелья.

МОСОЛМАНДАР СӘҒҮД ҒӘРӘБСТАНЫНДА ЙӘШӘРГӘ ТЕЛӘЙ. Ультра уң карашлы сәйәси көстәр: "Мосолмандар Европаға килеп йәшәргә тырыша", тигән хәбәрҙе ни саклы тылҡырға тырышмаһын, аҙаҡҡы тикшеренеүҙәр шуны раҫланы - Евросоюз илдәрендә насрани иммигранттары мосолмандарҙан күп тапҡырға артығыраҡ. Был турала Pew Forum үҙенең отчетында белдерҙе, тип яҙа Reuters.

Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә, үҙ ватанынан икенсе урынға күскән 214 миллион халыҡтың 106 миллионы (49 процент) - насраниҙар, 60 миллионы ғына мосолмандар (27 процент).

Тәү ҡарамаҡҡа, былар араһында йәһүдтәрҙең һаны аҙ һымаҡ - 3,6 млн самаһы ғына. Ләкин был һан ер шарындағы йәһүдтәрҙең 25 процентын тәшкил итә икән, һәм ул әлеге конфессияның иң күсмә халыҡ икәнен дәлилләй.

Евросоюздағы 47 миллион мигранттың 13 миллионы - Ислам динендәге халыҡ, калғандары насрани динендәгеләр. Йәғни насраниҙар - 26 миллионға - ике тапҡырға күберәк килеп сыға.

Тикшеренеүҙәр йәнә шуны асыҡланы. кешенең ҡайһы илгә өҫтәнләк биреүе уның ниндәй дин тотоуы менән туранан-тура бәйле икән. Мосолмандар өсөн Сәғүд Ғәрәбстаны беренсе урынды биләй - был илгә, башлыса, Ғәрәп илдәренән, Һиндостандан, Пакистандан, Индонезиянан һәм Филиппиндан эшкә тип, киләләр.

* * *

ШӘЙЕХ УСАЙМИН (Р.F.) ШУЛАЙ ТИЕР БУЛҒАН: "Ислам динендә булмаған илдәрҙә мосолмандарҙы дин, әхлаҡ һәм тәртип йәһәтенән күп ҡуркыныс нәмәләр һаҡалап тора! Беҙ бындай илдәрҙә йәшәргә киткәндәрҙең аҙаҡ нисек үҙгәреп ҡайткандарын күрҙек. Улар боҙолоп ҡайтты, ҡайһы берҙәре хатта диндән яҙып, мосолмандарҙан һәм динебеҙҙән көлдөләр, бындай бәләләрҙән беҙҙе Аллаһ саҡлаһын!" ("Мәжму'у фәтәүә" № 388).

Филем һәм ғәмәл

ДОҒА ҚЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Ҡөрьән уҡығас бағышлау һәм саҙаҡаларға доға ҡылыу тәртиптәре

Доға ҡылыусыға тейешле эш

Доға ҡылыусы доға ҡылғанда донъя-ахирәт маҡсаттарын үҙенең эсенә йыйған доға менән доға ҡылыр.

Рәсүлебеҙ Мөхәммәд Мостафа салләллаһү ғәләйһис үә сәләмдең күп ваҡытта яратып ҡылған доғаһы: "Раббәнәәә әтинәә фид-дүнйәә хәсәнәтән үә фил-әәхирати хәсәнәтән үә ҡынәә ғәҙәәбән-нәәр" булған. мәғәнәһе: "Эй, Раббым! Донъялыҡта беҙгә изгелек эшләй торған хәйерле ғүмер бир. Ошо изгелегебеҙ бәрәкәтендә әхирәттә йәннәтенде насип ит, ут ғазабындан һаҡла".

Рәсүлебеҙ ғәләйһис-сәләм ҡылған доға: "Аллаһүммә әғғынии күллә хайри үә әғиднии мин күлли шәрри" - лер. Мәғәнәһе: "Эй, Аллаһым! Һәр бер изгелекте бир һин миңә, һәр бер яуызлыҡтан һаҡла һин мине", - тимәктер.

Әбү Һурайранан риүәйәт: Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Доға ҡылған мосолмандың доғаһы ҡабул ителмәйенсә ҡалмаҫ, йә ул кешегә донъяла бирелер, йә иһә уға ахирәттә әҙерләнер".

Риүәйәттер: "Ҡиәмәт көнө булғанда Аллаһ Тәғәлә һәр доғаны күрһәтер: донъяла ваҡытта кешенең ҡабул ителмәгән доғаһын, Аллаһ Тәғәлә ул кешегә әйтер: "Эй, минең бәндәм! Һин миңә шундай көндә доға ҡылған инең, мин һинең доғанды тоттом, ошо доғаң урынына - ошо сауаптыр". Кешегә сауап һәр ваҡыт бирелер, хатта кеше бер доғаны ла һис ҡабул ителмәгәненә риза булһа ла.

Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Доға ул ғибәҙәт". Бының һуңында Аллаһ Тәғәләнең һүҙен уҡыны: "Үә ҡаалә Раббәкүм" - Раббығыҙ әйтте: "Миңә доға ҡылығыҙ, доғағыҙҙы ҡабул итермен. Минең ғибәҙәтемдән ҙурайған, тәкәбберләнгән кешеләр тиҙҙән йәһәннәмгә керерҙәр".

Әбү Ҙәрр әйтте: "Яҡшылыҡ йөҙөнән доға етер, аштың тәме өсөн тоҙ еткән кеүек".

Риүәйәттер: "Муса ғәләйһиссәләм Аллаһ Тәғәләнән һораны: "Эй, Раббым! Ҡайһы ваҡытта мин һинән һорайым икән, һин шул ваҡытта ҡабул итер инең", - тип.

Аллаһ Тәғәлә әйтте: "Һин минең бәндәм һәм мин һинең Раббың. Ҡайһы ваҡытта доға ҡылһаң, мин һине шул ваҡытта ҡабул итермен".

Муса ғәләйһис-сәләм ҡатҡат ҡайтарып Аллаһ Тәғәләнән һораны. Уға Аллаһ Тәғәлә әйтте: "Миңә һин кистең уртаһында доға ҡыл һәм дөрөҫлөктә мин ҡабул итермен, төндә миңә доға ҡылһаң да ҡабул итермен".

Жәғфәр бин Бәркәндән риүәйәт әйтелде, ул Салихтан риүәйәт әйтте: "Аллаһ Тәғәлә әйтә: үҙегеҙ минән һорайһығыҙ, әммә күңелдәрегеҙ минән алынған, күңелдәрегеҙ миндә түгел", - тип.

Ҡайһылар әйтә: "Беҙ доға ҡылһаҡ та ҡабул булмай", - тип.

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдә әйтә: "Эй, мөьминдәр! Доға ҡылығыҙ, әгәр доға ҡылһағыҙ мин һеҙҙең доғаларығыҙҙы ҡабул итермен", - тип. Хәким әйтте: "Уның өсөн доғаларҙы күктән тыя торған һүҙҙә 7 төрлө сәбәптәр бар", - тине. "Улар нимәләр?" - тип һорарнылар. Хәким әйтте: "Ул етенең берәһе - һеҙ Раббығыҙҙы асыуландырҙығыҙ ҙа, уның ризалығын алманығыҙ, йәғни һеҙ Аллаһ Тәғәләне асыуландырырлыҡ эштәр эшләнегеҙ. Был эштәрҙән ҡайтмайһығыҙ, эшләгән эшегеҙгә үкенмәйһегеҙ.

Икенсеһе: "беҙ Аллаһ Тәғәләнең ҡолдары" тип әйтәһегеҙ, ләкин ҡолдар эшләй торғанды эшләмәйһегеҙ, йәғни бәндә хужаһы ҡушҡанды эшләйҙер, ҡушҡанынан сыҡмайҙыр.

Өсөнсөһө: һеҙ Ҡөрьәнде уҡыйһығыҙ, әммә хәрефтәренә хөрмәт ҡылмайһығыҙ, йәғни һеҙ Ҡөрьәнде ололап уҡымайһығыҙ. Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә бойорғанды ҡылмайһығыҙ.

Дүртенсе: һеҙ әйтәһегеҙ: "Беҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләмдең өммәте", - тип, ләкин һеҙ пәйғәмбәр ғәләйһиссәләмдең сөннәтен үтәмәйһегеҙ, йәғни һеҙ харамдар эшләйһегеҙ, шул харам эштәрҙән ҡайтмайһығыҙ.

Бишенсе: "Аллаһ Тәғәлә ҡаршында донъя себен ҡанатына ла тормай", - тип әйтәһегеҙ, ә үҙегеҙ донъяға күңел һалдығыҙ.

Алтынсыһы: һеҙ әйтәһегеҙ: "донъя бөтәсәк" тип, ә һеҙҙең эштәрегеҙ ул донъяла һәр ваҡыт тороусылар эше кеүектер.

Етенсеһе: һеҙ әйтәһегеҙ: "ахирәт донъянан яҡшыраҡ" тип, ә үҙегеҙ ахирәтте ижтиһад ҡылмайһығыҙ, донъяны ахирәттән артыҡ күрһәгеҙ.

Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылған кешенең эсе харамдан пак булырға тейештер, сөнки харам нәмә доғаны ҡабул итеүҙән тыялыр. Сәғид әйтте: "Эй, Расүлүллаһ ғәләйһис-сәләм! Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылам да, ҡабул ителмәй", - тип. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Эй, Сәғид" харамдан һаҡлан. Эсенә бер лоҡма (ҡабым) харам нәмә кеРһә, уның доғаһы 40 көнгә ҡәҙәр ҡабул ителмәҫ".

Доға ҡылған кеше ашыҡмаҫҡа тейештер, Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылһа, Аллаһ Тәғәлә уны шикһеҙ ҡабул итте: беҙгә ҡабуллыҡ шул ваҡытта уҡ беленер, ҡайһыһы шул ваҡытта уҡ беленмәҫ, икенсе ваҡытта беленер; ҡайһы берәһе ахирәттә беленер, донъяла беленмәҫ.

Муса ғәләйһис-сәләм Фирғәуен һәм уның кәүеменә бәддоға ҡылды. Һәрун ғәләйһиссәләм "әмин" (ҡабул ит) тип әйтте. Уларға: "Һеҙҙең доғағыҙ ҡабул ителде, эшегеҙҙә булығыҙ", - тип Аллаһ Тәғәлә вәхи итте.

Ибн Ғәббәс әйтте: "Доға менән ҡабул итеү араһында 40 сәнә (ваҡыт иҫәбе) үтте", - тине.

Ибн Йәзидтән риүәйәт ителде: "Рәсүлүллаһ әйтте ти: "Бер кешене Аллаһ Тәғәлә һөйһә, уның йөҙөнә бәлә менән һуғыр. Доға ҡылғас, Аллаһ Тәғәлә беҙ һөйләгән өс хасыяттың берәһен бирмәй ҡалмаҫ: йә иһә ҡылған ваҡытында уҡ, йә һуңыраҡ, йә иһә ахирәттә доғаның әжерен бирәсәктер.

Хакимдарҙың берәһе әйтте: "Дүрт төрлө кешегә бәхет булмаҫ". Ул:

1. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмгә салауат әйтергә һаранланған кеше;
2. Мәзин аҙан әйткәндә артынан мәзин кеүек аҙан һүҙҙәрен ҡабатлап уҡый бармаған кеше;
3. Изгелеккә кеше ярҙам һорап, ярҙам итмәгән кеше;
4. Үҙенә һәм мөьминдәр өсөн намаҙҙары артынан доға ҡылырға иренгән кеше.

Ибн Ғәббәс радыяллаһу ғәнһе әйтте: "Ҡасан байрам һәм йома көн булһа, мәйеттәрҙең рухтары ҡәберҙән сығып, өйҙәренең ишегенә килерҙәр һәм әйтерҙәр: "Эй, ҡарындаштарым! Был мөбәрәк кистәрҙә беҙҙең өсөн саҙаҡа биреү менән беҙгә мәрхәмәт ҡылығыҙ. Әгәр ҙә уны бирергә йомартлыҡ ҡыла алмаһағыҙ, "Фәтихә" йә иһә бер сүрә уҡып беҙҙең күңелдәребеҙҙе рәхәтләндерегеҙ. Эй, беҙҙең йортобоҙҙа тороусылар! Эй, беҙҙең малыбыҙҙы бүлеп алған вариҫтарыбыҙ! Эй, беҙҙең ҡатындарыбыҙҙы (ирҙәребеҙҙе) алған кешеләр! Эй, беҙҙең йәтимдәребеҙҙе ҡараған кешеләр! Һеҙҙән, һис булмаһа, берәй кеше беҙҙе иҫенә төшөрәме? Беҙ хәҙер тар ләхеттә ятабыҙ, һеҙҙең доғағыҙға мохтажбыҙ, зинһар беҙҙе доғағыҙҙан ҡалдырмағыҙ". Әгәр берәйһенән саҙаҡа йә доға тапһалар, һөйөнгән хәлдәрендә ҡәберҙәренә ҡайтырҙар; әгәр доға ҡылыусы тапмаһалар, борсоулы хәлдә ҡайтырҙар.

Ғабдуллаһ әл-Әнтәки әйтте: "Күңелдең дарыуы 5 нәмәлер":

1. Изгеләр менән бергә ултырыу;
2. Ҡөрьән уҡыу;
3. Биш ваҡыт намаҙ уҡыу;
4. Харамдан эсте бушатыу;
5. Таң ваҡытында Аллаһ Тәғәләгә ялбарыу.

Ибн Ғәббәс радыяллаһу ғәнһү Пәйғәмбәр ғәләйһиссәләмдән риүәйәт әйтте: "Аллаһ Тәғәләнән ҡулдарығыҙҙың устары менән һорағыҙ, ҡулдарығыҙҙың устары менән йөҙҙәрегеҙгә һыйпағыҙ". Аллаһу әғләм.

Беҙҙе уң ҡулыбыҙҙа ус төбөнә ғәрәп һаны менән 18(11) тип бураҙна һыҙылған, һүл ҡулыбыҙҙың усында 81(11) һаны һыҙылған (ул бураҙна булып тора) икенсе бергә ҡушһаҡ 99 һаны килеп сыға, был (Аллаһ Тәғәләнең 99 исемен күрһәтеүсе билгелер. Әгәр 81 һанынан 18 һанын алһаҡ 63 һаны килеп сыға, һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд Мостафа салләллаһу ғәләйһис үә сәләмдең вафат булған йәшенә күрһәткестер, сөнки ул 63 йәшендә вафат булған. Аллаһу әғләм.

Мәжлестә Ҡөрьән уҡыр алдынан уҡыла: "Бисмилләәһир-рахмәнир-рахим. Нәүәйтү биҡыраа әтил-Ҡурьәән, мирридааир-рахмәән, үә тәраддү шәйтаан, үә тәнәүирул-ҡубри мин әһлил-имәән". Мәғәнәһе: "Ниәт ҡылдым Ҡөрьән уҡырға. Раббым, үҙендең ризалығың өсөн, шайтандан алыҫ булыу өсөн, иман менән үткән ҡәбер әһелдәренең рухтарын шатландырыу өсөн". Әмин.

Бынан һуң түбәндәге аят уҡыла:

"Бисмилләәһир-рахмәнир-рахим. Үә иҙәә ҡури"әл-Ҡуръәәни фәстәмиғү ләһүү үә әннҫитүү ләғәлләкүм түрхәмүүн". Мәғәнәһе: "Әгәр берәй урында Ҡөрьән уҡылһа, ишетегеҙ уны эштәрегеҙҙе ҡуйған хәлдә, бәлки Аллаһ Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеүсе булырһығыҙ". Әмин.

(Дауамы бар).

"Дәғүәт" нәшриәте.

"Йә Аллаһы Тәғәләм, һине танығандарҙың йөрәге һиңә генә буйһондо һәм һине яратыусыларҙың муйыны тик һинең алдында ғына эйелде. Йа Раббым! Үҙеңдең йомартлығындапн әжер бир һәм Үҙеңдең сикһеҙ рәхмәтең менән хаталарымды ғәфү ит!"

Имам әш-Шәфи.